Мәктәп гәзите



# Тәнәфес

## Халыкты тел милләт итә.

1999 йылдың ноябрь айында ЮНЕСКО үткәргән конференцияла туған телдәр проблемаһы ҡарала һәм ул 2000 йылдың февраленән билдәләнә башлай. Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы мәғлүмәттәренә ҡарағанда, ер шарындағы 6700 телдең яртыһына юғалыу ҡурҡынысы янай. Шуға ла һәр халыҡтың ғөрөф-ғәҙәтен, йолаларын, йыр-моңдарын, ауыҙ-тел ижадын, ғөмүмән, телен һаҡлап ҡалыу маҡсатында 21 февраль – Халыҡ-ара туған-тел көнө тип иғлан ителә. Халыҡ- ара туған тел көнө ЮНЕСКО тарафынан 1952 йылдын 21 февралендә Данке ҡалаһында туған бенгали телен яҡлап , дәүләт теле тип таныуҙы талап итеп, демонстрацияға сыҡҡан һәм полицейскийҙар пуляһынан вафат булған студенттар иҫтәлегенә 1999 йылда иғлан ителә.

Һәр халыҡтың тыуып үҫкән ере, иле булған кеүек, ғәзиз хазинаһы - әсә теле бар. Был хаҡта халыҡта “Иле юҡтың көнө юҡ, теле юҡтың йүне юҡ” тип әйтелә.

Туған тел… Кеше тәү мәртәбә ошо телдә “әсәй”, ”атай” һүҙҙәрен әйтә. Ошо тел ярҙамында үҙенең тирә-яғындағы төрлө төшөнсәләр, атамалар менән таныша, кешеләр менән аңлаша. Әхләк төшөнсәләрен әсә телендә аңына һеңдерә, күңеленә беркетә.

Халыҡтың бай, саф телендә туған тәбиғәт кенә түгел, ә уның бөтә тарихы, рухи донъяһы сағыла.

Бына ни өсөн кәрәк ул туған телде өйрәнеү! Бына ни өсөн туған телде өйрәнеү кешенең илһөйәр булып тәрбиәләүендә төп урында тора!” - тип әйткән рус яҙыусыһы К.Ушинский.

21 февраль- Халыҡ- ара туған тел көнө. Дәрбиш урта мәктәбендә был көнө төрлө саралар: линейка, газеталар, рәсемдәр конкурсы, иншалар конкурсы һәм ҙур сара үтте «Әсәм теле- сәсән теле». Был сара 8-11 синыф укыусылары өсөн үткәрелде. Шулай уҡ был сараға “Тан нурҙары» әҙәби түнәрәгенен ағзалары һәм өлкә диктантында ҡатнашыусылар саҡырылды. Был саранын маҡсаты: Әсә теленә ҡарата һөйөү, ихтирам, ғорурлыҡ тойғолары уятыу, балаларҙың телмәрен халҡыбыҙҙың мәкәлдәре, йырҙары, бейеүҙәре тураһында белемдәрен байытыу.

Үҙенең әсә теленә вайымһыҙ ҡараған кеше – ҡырағай кеше, зарарлы кеше. Сөнки шуның менән ул үҙ халкының үткәненә, хәҙерге хәленә һәм киләсәгенә ғәмһеҙлеген, битарафлығын күрһәтә.

Ә тел – халыҡ байлығы. Ул быуаттар буйына тупланған, халыкты халыҡ итеп, милләт итеп туплаған.Шунын өсөн буаттар аша беҙгә килеп еткән телде беҙ һаҡларға тейешбеҙ һәм киләсәк быуынга тапшырырға. Сара бик матур үтте: 6 синыф уҡыусылары яттан туған тел тураһында шиғырҙар һөйләнеләр, йырҙар һәм бейеүҙәр, ҡалаҡта һәм ҡумыҙҙа уйнанылар. Шәғирәләребеҙ үҙҙәренен шиғырҙары менән таныштырҙылар.









## Башҡорт әҙәбиәте әҫәрҙәрен тасуири уҡыу конкурсы.«Әсәм теле – сәсән теле» .

2 март көнө Дәрбиш урта мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән өлкә олимпиада һәм башҡорт әҙәбиәте әҫәрҙәрен тасуири уҡыу конкурсы.«Әсәм теле – сәсән теле» үткәрелде.

Был конкурс Башҡортостандың халыҡ шағиры, мәшһүр һүҙ оҫтаһы, драматург, прозаик, бөйөк уҡытыусы Мостай Кәримден тыуыуына 100-йыл тулыуына арналған.

Илен ҙурлағанды - иле ҙурлар, тигән мәҡәл бар бит. Мостай Кәрим үҙенең етмеш йылға яҡын ижад ғүмерендә Башҡортостанды ҙурланы, уны фронтта һаҡланы, уның 0с0н янды, көйҙө, ут эсенә инде. Уның йөрәге һәр ваҡыт Башҡортостан йөрәге менән бергә тибә. Мостай Кәрим 1919 йылдың 20 октябрендә Башғортостандын хәҙерге Шишмә районының Келәш ауылында тыуған.

1938-се йылда «Отряд ҡуҙғалды» тигән беренсе шиғыр йыйынтығы нәшер ителә; 1941-се йылда «Яҙғы тауыштар» тигән шиғыр китабы сыға. Бөйөк Ватан һуғышы башланыу менән фронтҡа китә, һуғышта элемтә башлығы һәм артиллерия штабы башлығы булып хеҙмәт итә. Ҡаты йәрәхәтләнә: мина ярсығы күкрәгенә инеп, йөрәгенә саҡ ҡына барып етмәй ҡала.

Һуғыштан ҡайтып килгәс ижади һәм ижтимағи эшкә бирелә. Барыһы 100-ҙән ашыу шиғриәт һәм проза китаптары, 10-дан ашыу пьесалары донъя күрә. Мостай Кәримдең әҫәрҙәре бер нисә тиҫтә телдәргә тәржемә ителгән.

Иң билдәле әҫәрәре: Шиғриәт йыйынтыҡтары: «Ҡара һыуҙар», «Ҡайтыу», «Европа-Азия», «Заманалар», пьесалары: «Айгөл иле», «Ҡыҙ урлау», «Ай тотолған төндә», «Салауат. Өн ҡатыш ете төш», «Ташлама утты, Прометей!»

Повестары: «Беҙҙең өйҙөң йәме», «Өҫтаған», «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ». 2005-се йылдың 21-се сентябрендә Өфөлә вафат була. Өфө мосолман зыяратында ерләнгән.

Конкурсты баһаланы жюри ағзалары:

Выдря Надежда Михайловна, Силәбе өлкәһе Мағариф һәм ғилем министрлығы ағзаһы,

Валеев Гәзел Камил улы, Силәбе дәүләт университеты доценты, филология фәндәре кандидаты,

Гайсина Флюза Фатҡулла ҡыҙы, Силәбе ҡалаһы адмистрацияһы ағзаһы, филология фәндәре кандидаты,

Мортазин Ҡамса Дәүлетбай улы, Силәбе урта профессиональ белем биреәү уҡыу йорто уҡытыусыһы, филология фәндәре кандидаты,

Муллагалямова Гөлнур Рәмзис ҡыҙы, Арғаяш районы Мағариф идаралығы ағзаһы, педагогия фәндәре кандидаты.

Конкурста ҡатнашты 36 уҡыусы. Конкурсҡа Аргаяш, Коншаҡ, Сосновка районы һәм Силәбе өлкәһенен №15 «Мәктәп- интернат» уҡыусылары килгән.

Конкурста енеүселәр айырым ике номинацияла өсәр категория буйынса билдәләнде: 5-6 синыф уҡыусылары, 7-8 синыф уҡыусылары һәм 9-11 синыф уҡыусылары.

Жюри ағзалары конкурста енеүселәрҙе билдәләне, Дәрбиш урта мәктәбе уҡыусылары тарафынан әҙерләнгән концерт тәҡдим ителде. 7-8 синыф уҡыусылары араһында беҙҙен уҡыусыбыҙ Сибагатуллина Гөлназ енеүсе дипломы менән бүләкләнде. Афарин, Гөлназ! Киләсәктә ҙур уныштар, бәхет, һаулыҡ теләйбеҙ. Әгәр балалар , Гөлназ кеүек, туған телен, йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, тарихын өйрәнһәләр – телебеҙ үҫәсәк.






# Көләмәстәр

- Әсәй, урамда йөрөп киләйем әлә?
- Бысраҡ ҡолаҡтарын менәнме?
- Юҡ, иптәштәрем менән.

*************************

Алты йәшлек ҡыҙ:

- Әсәй, һин бөгөн бигерәк матурһың!

- Рәхмәт, ҡыҙым!

Ун алты йәшлек ҡыҙ:

-Әсәй, һин бөгөн бигерәк матурһың!

-Күпме аҡса кәрәк тиһең, балам?

***************************

- Күҙҙәрең ҡып-ҡыҙыл. Әллә яҙғы конъюктивитмы?
- Юҡ, төнгө интернет.

***************************

Дәрес мәлендә уҡытыусы Мараттан:

- Янында ултырған малайҙы уят әле,- тип үтенә.
- Ә нинә мин!- тип аптырап ҡарай ҡыҙ.
- Уны бит һеҙ йоҡлаттығыҙ.

***************************

Һуңғы сирек тамамланып килә. Булат дәрестән ҡайта ла атаһына:

- Их, әсәйем менән шундаә бәхетлеһегеҙ,-ти.
- Нимәгә улай тиһең, улым?
- Быйыл яңы дәреслектәр  һатып  алырға тура килмәç. Мин был класстан күсмәй ҡалам.

***************************

Урал мәктәптән ҡурҡынған йөҙ менән килеп инә лә:

- Атай,әсәй, һеҙгә мин бөгөн минен көндәлеккә күҙ һалмаçка кәнәш итәм,- ти.
- Шул арала әсәһе йөрәгенә, атаһы ҡайышҡа тотона. Малайҙың көндәлеген асып ҡараһалар....... « бишле» билдәһе тора! Әлкәндәрҙең икеһе лә иçтәрен яҙып  ҡолай.
- Бына шуға иçкәрткәйнем дә инде,-ти

***********************************

**Дина Талхина**

Үҙ телемдә һөйләшәм,
Минән ҡоштар көнләшә.
Үҙ телемдә һөйләшәм,
Мин ҡояшҡа тиңләшәм.
Үҙ телемдә һөйләшәм,
Бар булмышым нур ғына
Үҙ телемдә һөйләшәм,
Күңелкәйем йыр ғына…

# Тел тураһында мәҡәлдәр

«Тел – күңелдең көҙгөһө»,
«Татлы тел таш ярыр»,
«Һүҙ – бер көнлөк, тел – ғүмерлек»,
«Тел яҙмышы – ил яҙмышы»,
«Әсә теле бер булыр»
«Күңеле буштың теле буш»
«Иләк һорарға ла тел кәрәк»
«Кеше күрке – йөҙ, йөҙҙөң күрке – күҙ, уйҙың күрке –тел, телдең күрке – һүҙ»



# Ҡотлайбыҙ!

**Ҡәҙерле уҡытыусылар** !

Ысын күнелдән ҡотлайбыҙ  һеҙҙе  Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар байрамы менән.
Шул   гүзәл бәйрам көнөндәге йылмайып баккан кояштай һәр  вакыт балҡып йәшәгез.
Күңелегеҙдән шатлык, тәнегеҙҙән һаулыҡ -сәламәтлек, йортоғоҙҙан иминлек-бәркәт китмәһен!

Тормош юлың һәр ваҡыт балҡып торһын,

Яғымлы, шат булһын күңелең.

Оҙон гүмер, бәхет-шатлыҡ менән

Бер кайғыһыҙ үтһен гүмерең.

Ҙур бәхеттәр юлдаш булһын һиңә,

Көндәреңде шатлыҡ биҙәһен.

Сәләмәтлек – ярты бәхет, тип әйтәләр,

Ошо бәхет ситләп үтмәһен.

к/м   укыусылар.



Төҙөүсе-авторҙар: 6 синыф уҡыусылары  Тимербаева Сабина, Шайхисламова Диана, Иксанова Алсу.

Етәксе Фахретдинова Гульсира  Фасхитовна.


Не удается отобразить связанный рисунок. Возможно, этот файл был перемещен, переименован или удален. Убедитесь, что ссылка указывает на